## 21 –се практик эш

**Темаһы:** Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге. Безопасность дрожного движения.

**Башҡарыласаҡ эш төрҙәре:** бәйләүестәрҙе ҡулланыу буйынса практик биремдәр башҡарыу.

**Наименование работы:** выполнение практических заданий на применение послелогов.

**Маҡсат:** юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында әңгәмә алып барыу, бәйләүестәрҙе ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырыу.

**Ваҡыт нормаһы:** 2 сәғәт.

**Әҙәбиәт:** 1.Усманова М.Ғ., Солтанғолова З.З. Башҡорт теле: башҡорт теле дәүләт теле итеп уҡытылған һөнәри белем биргән ойошмалар өсөн уҡыу ҡулланмаһы. Өфө: Китап, 2015.

**Техник хәүефһеҙлек ҡағиҙәләре:**

1.Эште инструкцион – технологик карта буйынса башҡарырға.
2.Эш урынын тәртиптә тоторға. 3.Кеҫә телефондарын һүндерергә.

**Инеш инструктаж**

1.Һүҙлек эше: юл – дорога, путь юлсы, юлаусы – путник
юлдаш – спутник юл саты – перекресток иғтибар – внимание
хәүеф – опасность юл аша – через дорогу киҫәтә – предупреждает
ойошма – организация шәхси – частный ылаусы – извозчик
тимер –юл –железная дорога йәйәүле - пешеход

2.бәйләүестәр – послелоги: **аша** – через: күпер аша – через мост
**менән** – с, совместно: әсәй менән – с мамой, **буйлап** – по: юл буйлап
**өсөн** – ради, за, для, благодаря: һинең өсөн – для тебя
**кеүек, шикелле, һымаҡ** – как, совно, подобно: малай һымаҡ – как мальчик
**тиклем, хәтлем, саҡлым, ҡәҙәр** – до: колледжға тиклем – до колледжа
**ҡаршы** – против, напротив: миңә ҡаршы – напротив меня **элек -** до
**башҡа, тыш** – кроме: һинән башҡа – кроме тебя **бирле** – с тех пор

**Эш башҡарыуҙың йөкмәткеһе һәм эҙмә – эҙлелеге:**

**1-се бирем.** Тексты рус теленә тәржемә итегеҙ (переведите текст на русский язык).

Республиканың транспорт тарихынан

Өфөлә беренсе автомобилдәр 20-се быуаттың башында күренә башлай. 1914 йылда ҡалала 19 автомобиль була: 4 - әүһе – ойошмаларҙыҡы, 15 – шәхси автомобиль иҫәпләнә. Ҡала урамдары буйлап 400 ылаусы йөрөй.

Республиканың Һамар –Өфө – Златоуст – Силәбе – Екатеринбург тимер юлы маршрутын асыу 1885 йылда раҫлана. Ағиҙел йылғаһы аша тимер юл 1888 йылда төҙөлә. Хәҙерге ваҡытта Һамар – Өфө – Силәбе электрлаштырылған тимер юлы йөк ташыу һәм пассажирҙар йөрөтөү өсөн ҡулланыла.

Һыу транспорты өсөн ҡулланылған һыу юлы оҙонлоғо 1018 км. 1858 йылдан Ағиҙел буйлап пароходтар йөҙә башлай. 1859 йылда Өфө –Ҡазан, ә 1960 йылдан Түбәнге Новгородҡа тиклем пассажирҙар йөрөтөү өсөн һыу юлы маршруты асыла. 1937 йылда Ағиҙел йылғаһы пароходтары ойошмаһы

асыла. Әлеге ваҡытта пассажирҙар өсөн Өфө –Пермь - Өфө, Өфө – Ҡазан - Өфө, Өфө- Түбәнге Новгород – Өфө, Өфө – Әстерхан – Өфө һыу юлы маршруттары бар.

Һауа транспорты 1933 йылда Өфө – Толбазы –Стәрлетамаҡ – Ишембай – Мәләүез – Мораҡ – Баймаҡ – Магнитогорск – Белорет – Архангел –Өфө маршруттары буйынса асылғайны. Хәҙерге ваҡытта самолет Өфөнән Рәсәйҙең 27 ҡалаһына оса һәм бик күп халыҡ – ара маршруттары эшләй.

**2-се бирем.** Шиғырҙы күсереп яҙығыҙ (спишите стихотворение):

Светофор

Светофор тора юлда
Күрһәтә ни бар алда.
Йә киҫәтә – көтөгөҙ,
Йә, рөхсәт, ти, үтегеҙ!
Һары төҫтә – иғтибар,
Тимәк, юлда хәүеф бар.

Йәшел янһа – юл тыныс,
Ә ҡыҙылы – ҡурҡыныс.
Юл аша сығыр элек,
Тор, дуҫҡай, шуны белеп:
Тик йәшел янһа ғына,
Сыҡ һин юл аръяғына.

**3-сө бирем. Вариантлап эш.** Бирелгән һөйләмдәрҙе кәрәкле бәйләүестәр ҡуйып күсереп яҙығыҙ (спишите предложения, поставив вместо точек нужные послелоги):

**1- се вариант:** Мин колледжға ... автобус менән барҙым. Атайым урамда юл .... сыҡты. Һинең ... мин бөтә нимә эшләйем. Лампа ҡояш ... бик шәп яҡтырта.

**2-се вариант:** Беҙ Мәскәүгә ... поезд менән барҙыҡ. Йәйәүле тротуар ... йөрөргә тейеш. Баҙарға беҙ әсәйем ... барҙыҡ. Ул малай ... шатланды.

**4-се бирем.** Башҡорт теленә тәржемә итегеҙ ( переведите на башкирский):

- Привет, Саша!
- Здравствуй, Маша!
- Ты на чем добираешься до колледжа?
- На машине. А ты?
- Я – на автобусе. Ты с кем ездишь?
- С отцом.
- А я с друзьями.

**5-се бирем.** Башҡортса яҙығыҙ (напишите на башкирском): дорога, железная дорога, спутник, прямая дорога, счастливого пути, пешеход, красный цвет.

**Биремдәрҙе башҡарғандан һуң студент белергә һәм эшләй белергәтейеш:**

1.Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында, бәйләүестәр төшөнсәһен билдәләргә,
2.Һөйләмдәр төҙөү, бәйләүестәрҙе ҡулланыу буйынса күнекмәләр булдырырға.

**Контроль һорауҙар һәм биремдәр:**

1.Какие ПДД необходимо знать каждому человеку? (студенты, хорошо владеющие башкирским языком, отвечают на башкирском)

**Студенттарҙың үҙаллы эше өсөн биремдәр:**

Дәреслектән 212- 214 –се биттәр, Л.2.93 –сө бит. «Светофор» шиғырын тасуири уҡырға (подготовить выразительное чтение стиха «Светофор»).

Уҡытыусы______________ Мөхөтдинова Ф.Р.